1. Мәҡәлдең дауамын яҙығыҙ: <u>*Белдең бер һүҙ...*</u>
2. Телмәр эшмәкәрлегенең дүрт төрөн һанап китегеҙ?
3. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр ниндәй ҡатламға инә?

*Ғилемлелек* ***<u>– даръялыр,</u>***
*Ҙур* ***<u>рыялыҡ</u>*** *булмаһа;*
*Аҡыллы әҙәм –* ***<u>олуғтыр,</u>***
*Асыуы артыҡ булмаһа. (Аҡмулла)*

*4. Йөрәгем –* ***<u>ҡәберлек минең:</u>***
*Унда үткәндәр илай.*
*Йөрәгем –* ***<u>сәңгелдәк минең:</u>***
*Унда киләсәк даулай. (Р.Ғарипов)* Билдәләнгән һүҙҙәр шиғырҙа нимә булып килә?

*5. Йырлай алмам һинең йәмдәреңде,*
*Йәшәй алмам йырһыҙ, моғайын.*
*Сағылыңда үҫкән сихри моңло*
*Бер ҡурайың ғына булайым.* (Р.Сафин) Ҡылымдарҙы табып, затын билдәләгеҙ.

6. Һөйләмдәге эйәреүсе киҫәктәр менән эйәртеүсе киҫәктәрҙең, шулай уҡ эйәрсән һөйләм менән баш һөйләмдең бәйләнешен белдереүсе ярҙамлыҡ һүҙҙәр нисек атала?

*7.* Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, аңлатығыҙ: *гилем ҡош аҡыл ҡанат.*

*8. Болон сәскәләрен һыйпап үтәм,*
*Ҡапыл күрәм:алда балтырған.*
*Шул үләндең исемен әллә нимә*
*Йөрәгемә уйып ҡалдырған. (Р.Бикбаев)* алмаштарҙы табып төрөн билдәләгеҙ.

9. Шиғырҙа ни өсөн йәйәләр ҡулланылған, дөрөҫ яуап яҙырға.
*Ҡарайым, ситән артында*
*Ҡыҙ мине шәйләп тора.*
*(Бындағы гәҙәт буйынса,*
*Көнбағыш сәйнәп тора)* (М. Кәрим).

10. ***<u>Көнөн</u>*** *яуа,* ***<u>төнөн</u>*** *яуа,*
*Аҙна яуа бер тоташтан,*
*Әйтерһең, күк ҡолаған да,*
***<u>Һауа</u>*** *менән* ***<u>ер</u>*** *тоташҡан* (М. Кәрим).

Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр нисек атала?

11. *Муйыллыҡ. Эргәлә генә күҙ йәшеләй таҙа һыулы йылға. Бейек кенә ҡая. Һөҙәк яр.* Бирелгән һөйләмдәр составы буйынса ниндәй?

12. – Йә инде, Хөсәйен ағай өйҙә юҡ саҡта, **<u>һыйыныр</u>** мөйөш тапмай, бер яҡты ҡарашҡа, йылы һүҙгә зар-интизар булып, бәләкәй генә башын ҡайҙа тығырға белмәй йөрөгән ошо малайҙы йәлләп, эсем боша, йөрәгем **<u>яна торғайны</u>**, – ти был (Әнүр Вахитов). Һөйләмдәге аҫтына һыҙылған һүҙҙәр ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән?

13. Өмөтләнәм зәңгәр һауаларҙан,
Өмөтләнәм зәңгәр күктәрҙән,
Өмөтләнәм бөгөн аҙҙан ғына,
Өмөтләнәм һәр саҡ тын кистәрҙән,
Өмөтләнәм яҡты таңдарҙан,
Өмөтләнәм ғорур имәндәрҙән,
Өмөтләнәм нескә талдарҙан (И.Кинйәбулатов). сифаттарҙы табығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

14. Йомаҡтарҙың яуаптарын яҙығыҙ:

А)Өфөнөң уртаһында нимә тора?.

Б) Дәрес аҙағы ни менән бөтә?

В) Йылғала өс өйрәк менән дүрт ҡаҙ йөҙөп йөрөй ине. Уларға биш тауыҡ һәм ике әтәс ҡушылды. Йылғала бөтәһе нисә ҡош йөҙә?

15. ***Унлап, һигеҙләп*** һандарының төрөн билдәләгеҙ?

16. Биш ***баш*** умарта, ете ***дана*** китап. Билдәләнгән һүҙҙәр нисек атала?

17. ***Яңыса, һинеңсә, айыуҙай, йәйен*** һүҙҙәре ниндәй һүҙ төркөмгә ҡарай?

18. ***"Ҡурайҡайым еңел, көйө ауыр"*** тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ?

19. *Төҙөлөшө һәм мәғәнәһе яғынан ойошҡан, нығынған, телмәрҙә әҙер килеш ҡулланыла торған хис-тойғо биҙәкле, образлы һүҙбәйләнештәр. Улар кәмендә ике һүҙҙән тора, бер төшөнсәне белдерә* **нимә тип атала?**

20. *Айыу майы һөртөү* – мәғәнәһен аңлатығыҙ.

# Яуаптар.

1. Мәҡәлдең дауамын яҙығыҙ: Белдең бер һүҙ, белмәһәң меӊ һүҙ.
2. Уҡыу, ишетеү, һөйләү, яҙыу.
3. Ғилемлелек – даръялыр, Ҙур рыялыҡ булмаһа; Аҡыллы әҙәм – олуғтыр.

5. *алмам, булайым- 1-се зат ҡылымдары.*

19. Фразеологик берәмек

20. Урлау

15. Сама һандары.

14.

А)Ө хәрефе.

Б) С хәрефе менән.

В) Ете ҡош

13. зәңгәр, тын, яҡты, ғорур.

12. һыйыныр- сифат ҡылым, киләсәк заман.
Яна торғайны- ҡылым

7. *Ғилем- ҡош, аҡыл- ҡанат. Ғилем һәм ҡош, аҡылл һәм ҡанат һүҙҙәре һәйләмдә исем булып киләләр. Эйә менән хәбәр бер һүҙ төркөмөнән, шуның өсөн улар араһында һыҙыҡ ҡуйыла.*

8. *Шул-күрһәтеү алмашы.*
*әллә нимә- билдәһеҙлек алмашы.*

11. Бер составлы һөйләмдәр.

17. Рәүеш.

16. Нумератив һандар.